“01” 11 № 2

протоколы менән педагогтар советы ултырышында
Ҡабул ителде

“18-се башҡорт балалар баҡсаһы” МАББУ
мөдире _____/ Э.Б. Хисамова
№ 103 бойороғо менән “01” 11 2015 йыл
Раҫланды

Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә комплекслы тематик план өлгөһө

Тема	Үткәрелеү ваҡыты	Эш йөкмәткеһе	Ойоштороу формалары	Йомғаҡлау саралары
Белем көнө	*Сентябрь 1-се аҙна*	Уҡырға әҙерлек эштәре алып барыу, уҡыу эшмәкәрлегенә әҙерләү. Балаларҙың мәктәпкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙарын үҫтереү, китапҡа һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү. Балалар араһында бере – береһенә ҡарата дуҫлыҡ мәнәсәбәттәре формалаштырыу. Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәренең (мөдирҙең, тәрбиәселәрҙең, музыка һәм физкультура етәксеһенең) исем – фамилияһын, атаһы исемен дөрөҫ атарға өйрәтеү. Мәктәп тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Уҡытыусы һөнәренә ҡарата ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү.	Сюжетлы ролле уйындар “Балалар баҡсаһы”, “Мәктәп” һ.б. Тема буйынса әңгәмәләр. Физминуткалар өйрәнеү. Дидактик уйындар “Был әйбер кемгә һәм ни өсөн кәрәк?”, “Тиҙерәк йый”, “Таныҫ бел”, “Эш өсөн нимә кәрәк?”, “Мәктәпкә нимәләр кәрәк?” һ.б. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Йырҙар һәм музыкаль уйындар өйрәнеү. Хәрәктле уйындар. Маҡсатлы прогулкалар.	Балалар баҡсаһында белем байрамы.
Ғаиләм-ҡалғам	*Сентябрь 2-се аҙна*	Балаларҙа атай-әсәйҙәренә ҡарата ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү; йәмғиәттә ғаилә абруйын күтәреү, уның ҡиммәттәрен ҙурлау; ғаилә – балалар баҡсаһы бәйләнешен нығытыу.	Әңгәмәләр. Фотоһүрәттәр ҡарау. Сюжетлы һүрәттәр буйынса һөйләшеүҙәр. Сюжетлы – ролле уйындар “Ғаилә”, “Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Диактик уйындар уйнау. Альбомдар ҡарау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү.	«Ғаилә усағы» күргәҙмәһе.

Юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре	*Сентябрь 3-сө аҙна*	Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре тураһында белемдәр киңәйтеү. Яңғын хәүефһеҙлеге тураһында белемдәр формалаштырыу. Тәбиғәттә, урамда, өйҙә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре тураһында белемдәр киңәйтеү.	Әңгәмәләр, плакаттар. «Юлдарҙағы хәүефһеҙлек», «Өс күҙле дуҫым – светофор» темаларына әңгәмәләр. Фотоһүрәттәр. Уйын ситуациялары, балалар баҡсаһы буйлап экскурсиялар, дидактик уйындар, түңәрәк уйындар, маҡсатлы прогулкалар.	Сюжетлы-ролле уйын “Мин юлда”. Һүрәттәр күргәҙмәһе.
Хеҙмәтенә күрә хөрмәте.	*Сентябрь 4-се аҙна*	Балалар араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре булдырыу. Балалар баҡсаһы менән таныштырыуҙы дауам итеү. Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре һәм уҡытыусы һөнәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.	Әңгәмәләр. Сюжетлы-ролле уйындар: “Мин уҡытыусы”, “Балалар баҡсаһы”,	Фотоһүрәттәр күргәҙмәһе,
Алтын көҙ!	*Октябрь 1-се аҙна*	Тәрбиәләнеүселәрҙең көҙ тураһында белемдәрен киңәйтеү. Ауыл хужалығы һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен өйрәнеү. Көҙ миҙгеле тураһында дөйөмләштерелгән күҙаллауҙар үҫтереү. Йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың миҙгелгә яраҡлашыу үҙенсәлектәре тураһында белемдәр формалаштырыу. Төрлө күҙәтеүҙәр ойоштороу. Экосистема һәм тәбиғәт зоналары тураһында төшөнсәләр биреү. Йәнһеҙ тәбиғәт тураһында күҙаллауҙар үҫтереүҙе дауам итеү. Йыл миҙгелдәре тураһында белемдәр формалаштырыу.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау, йомаҡтар сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү. Йәшелсә – емештәр тураһында йомаҡтар уйлап сығарыу. Дидактик уйындар “Был ҡайҙа үҫә?”, “Һүрәткә ҡарап һөйлә”, “Тәбиғәт күренештәре”, “Серле моҡсай”, “Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”, “Тамыры, һабағы”, “Был ҡасан була?”, “Баҡсасы уйыны”, “Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тоа бел” һ.б. Саф һауала күҙәтеүҙәр. Иллюстрациялар ҡарау. Видеофильмдар, слайдтар ҡарау. Экологик һуҡмаҡ буйынса сәйәхәт.	Макеттар эшләү, “Башҡортостанда алтын көҙ” - күңел асыу.
Башҡортостан-гөлбостан!	*Октябрь 2-се аҙна*	Тыуған ауыл, ҡала, уның тарихы һәм үҫеше, географик яҡтан урынлашҡан урыны, архитектура үҙенсәлектәре, иҫтәлекле урындары, хужалыҡ тармаҡтары тураһында дөйөм төшөнсәләр формалаштырыу. Уның ҡалалары, йылға, күлдәре, шифаханалары тураһында белемдәрен киңәйтеү. Республикабыҙҙың башҡалаһы Өфөнөң тарихы, мәҙәни һәм тарихи ҡомартҡылары, бөгөнгө	Сюжетлы – ролле уйындар “Сәйәхәт”. Дидактик уйындар “Ҡыҙыл китап”, “Был ниндәй халыҡтың кейеме?”, “Биҙәкте төҙө”, “Карта буйынса эш”, “Файҙалы ҡазылмалар”, “Дәүләт символикаларын йый”, “Ауыл һәм ҡаланың айырмаларын тап”, “Ниндәй хужалыҡ төрө” һ.б. Энциклопедиялар менән эш. Экологик	Иртәлек “Башҡортостан илкәйем!” Ата-әсәләр менән берлектә паркка маҡсатлы

		уңыштары тураһында мәғлүмәттәр биреү. Тыуған яҡтың тарихы, үткәне, мәҙәниәте, хужалыҡ үҫеше, данлыҡлы кешеләре тураһында белемдәрен формалаштырыу.	һуҡмаҡта эш. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар, мәҡәлдәр, йомаҡтар өйрәнеү. Түңәрәк уйындары. Йырҙар, бейеүҙәр өйрәнеү. Гимн тыңлау. “Башҡортостан йылғалары” һ.б.	экскурсиялар.
Икмәк-ил байлығы.	*Октябрь 3-сө аҙна*	Ауыл хужалығы һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Кеше хеҙмәтен еңеләйтеүсе машиналар тураһында төшөнсәләрҙе киңәйтеү (сәскес, тырма, комбайн). Балаларҙы баҫыуҙа үҫкән башаҡлы үҫемлектәр һәм уларҙан төрлө аҙыҡтар әҙерләү тураһында балаларға белемдәрен киңәйтеүҙе дауам итеү. Уларҙы үҫтереү ысулдары менән таныштырыу. Туғайҙа үҫкән үләндәр, башаҡлы һәм шифалы үҫемлектәр менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ауыл хужалығы эшсәндәренең һөнәрҙәре, уларҙың хеҙмәтенең әҙәмиәте тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Элементар экологик күҙаллауҙар үҫтереүҙе дауам итеү. Башҡортостанда хужалыҡ эштәре – игенселек менән таныштырыуҙы дауам итеү.	Сюжетлы – ролле уйындар “Транспорт”, “Икмәк магазины”, “Малсылыҡ”, “Ҡымыҙсылыҡ” һ.б. Дидактик уйындар”, Был ҡайҙа үҫә?” “Нимә бешерҙем”, ”Үҫемлектең үрсеү схемаһы“, Икмәк бешерер өсөн нимә кәрәк”, “Икмәк нисек өҫтәлгә килә?”, “Үҫемлекте атап әйт”, “Өлөштәрен әйт” , “Был нидәй ашамлыҡ”, “Тәме буйынса таны”, “Икмәк магазинында ” һ.б. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар өйрәнеү. Йырҙар тыңлау., өйрәнеү. Түңәрәк уйындары уйнау. Уйын ситуациялары булдырыу. Әңгәмәләр. Иллюстрациялар ҡарау.	Фотокүргәзмә.
Моңдаръя (Сөмбөлә).	*Октябрь 4-се аҙна*	Байрамдың исемен , ғәмәлен атай белергә өйрәтеү. Байрамға ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү тәрбиәләү. Белем алыуға ынтылыш формалаштырыуҙы дауам итеү. Тулы һөйләм менән яуап ҡайтарырға өйрәтеүҙе дауам итеү .	Шиғырҙар ятлау, йомаҡтар сисеү, көҙ билдәләре буйынса халыҡ әйтемдәрен өйрәнеү. “Был ҡайҙа үҫә?”, “Тәбиғәт күренештәре”, “Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”, “Тамыры, һабағы”,”Был ҡасан була?”, “Ашарға ярай, ярамай”	Иртәлек “Сөмбөлә килде беҙгә”
Дуҫлыҡ ептәре.	*Ноябрь 1-се аҙна*	Тыуған ил – Рәсәй тураһында күҙаллауҙар үҫтереү. Илебеҙҙең дәүләт байрамдары тураһында белемдәр формалаштырыу. Рәсәйҙең дәүләт символикаһы	Дидактик уйындар “Минең ғаиләм”, “Минең дуҫтарым”, “Был нимәнең өлөшө”, “Тәбғәттә үҙ – үҙеңде тотоу”,	Тематик күңел асыу “Мин – Өфөлә

		менән таныштырыу. Илебеҙҙең тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу. Рәсәйҙең арҙаклы шәхестәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Рәсәй Федерацияһының күп милләтле ил икәнлеген балалар аңына һеңдереү. Рәсәйҙең башҡалаһы – Мәскәү, Президент тураһында белемдәр формалаштырыу.	“Һөйләү буйынса таны” h.б. Сюжетлы – ролле уйындар “Минең ғаиләм, “Беҙгә ҡунаҡтар килде”, “Автобус”, “Тыуған көн” h.б.	йәшәйем”.
Башҡорт халыҡ ижады.	*Ноябрь 2-се аҙна*	Балаларға халыҡ ауыҙ-тел ижады жанры-әкиәт менән таныштырыуҙы дауам итеү, хәтер, уйлау, һәләтен үҫтереү. Белем алыуға ынтылыш формалаштырыуҙы дауам итеү. Тулы һөйләм менән яуап ҡайтарырға өйрәтеүҙе дауам итеү . Мнемотаблицалар ярҙамында әкиәт һөйләргә теләк уятыу. Әкиәт һөйләгәндә ,уйлап сығарғанда эҙмә – эҙлелек һаҡларға өйрәтеү.Төп фекерҙе билдәләргә өйрәтеү.һүҙ байлығын арттырыу, һүҙбәйләнештәр,һөйләмдәр төҙөргә өйрәтеү. **Б**алаларҙы үҙ-ара дуҫ булырға,әкиәт геройҙары аша балаларҙа ыңғай һыҙаттар тәрбиәләү,кешелеклек, ихтирамлыҡ, дуҫлыҡ,ярҙамсыллыҡ сифаттары тәрбиәләү.	Дидактик уйындар “Тылсымлы исемдәр”, ”Әкиәткә билдә тап” , ”Юлда нимә кәрәк була?” Альбом ҡарау “Был ниндәй әкиәт геройы?”.	Әкиәттәр уҡыу: “Ҡурайсы”, “Ирәндек”, “Төлкө менән әтәс”, “Саҡ менән Суҡ”, “Әбйәлил”, “Урал батыр”. сәхнәләштереү .
Халҡым биҙәктәре .	*Ноябрь 3-сө аҙна*	Балаларҙы башҡорт халҡының милли кейеме һәм биҙәктәре менән таныштырыуҙы дауам итеү, өҫ кейемдәренә төшөрөлгән биҙәктәрҙе күрһәтеү, актив һүҙлектә камзул,күлдәк,елән,бүрек h.б һүҙҙәрҙе ҡулланырға ярҙам итеү,бәйләнешле телмәрҙе үҫтереү, халҡыбыҙ тарихына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүҙе дауам итеү.	Темаға ярашлы һүрәттәр ҡарау, әңгәмә “Милли кейем”. Дидактик уйындар “Берәү-күп”(күлдәк-күлдәктәр,ҡашмау-ҡашмауҙар h.б), “Һүҙҙә нисә ижек”, “Башҡорт күлдәге”, “Баласты биҙә”, һүрәт төшөрөү: “Ситек”, әүәләү “Сулпылар”	Ата-әсәләр менән берлектә ҡурсаҡтарға башҡорт күлдәге тегеү
Әсәйҙәр көнө.	*Ноябрь 4-се аҙна*	Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү (төҙөүсе, ташсы, тегенсе, китапханасы, дизайнер, модельер). Уларҙың эш ҡоралдары, хеҙмәтенең әһәмиәте тураһында аңлата	Сюжетлы – ролле уйындар “Әсәйҙәр - ҡыҙҙар”, “Бөҙрәхәна”, “Поликлиника” h.б. Дидактик уйындар “Был предмет кемгә кәрәк”, “Буяусы булам тиһәң”,	Иртәлек “Әсәйем – ҡәҙерлем!” Ҡул эштәре

		белергә өйрәтеү. Мәҙәниәт һәм көнкүреш учреждениялары менән таныштырыу (театр, кинотеатр, ателье) Әсәйҙәргә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Уларға ҡарата хәстәрлекле ҡараш үҫтереү. Гендер тәрбиәһе.Баланы енси булмышына ҡарап үҙенең ғаиләлә, йәмғиәттә башҡарасаҡ роле тураһында аңлатыу. Ҡыҙ – буласаҡ әсәй, ғаилә усағын һаҡлаусы.	“Айырып һал”, “Ярай- ярамай”, “Һүҙҙәр теҙмәһе”, “Наҙлы һүҙҙәр” , “Был кемдең эш ҡоралы?” , “Моделгә ҡарап һөйлә”.	күргәҙмә.
Һаумы ҡыш!	*Декабрь 1-се аҙна*	Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү.Ҡышҡы тәрбиғәт үҙенсәлектәре тураһында белемдәрен байытыу (һыуыҡ, ҡар күпләп яуыу, әсе елдәр, туңдырыу, ҡырау).Ауылда, ҡалала кешеләрҙең торошо һәм хеҙмәте тураһында белемдәр киңәйтеү. Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Арктика һәм Антарктика тәбиғәте менән таныштыру. Ер шарында төрлө ярымшарҙарында ҡыштың үҙенсәлектәре тураһында күҙҙалауҙарын үҫтереү. Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡыш көндәре кешеләрҙең хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу. Көн һәм төн тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу.	Дидактик уйындар “Был ҡасан була”, “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ”, “Ҡыш билдәләрен әйт”, Мнемотаблица, моделдәр менән эш. ”Экологик пирамида”, “Туҡланыу сылбыры”,“Йыл миҙгелдәре“. Был йәнлек ҡайҙа йәшәй”, “Һөйләү буйынса таны”, “Был ниндәй спорт төрө” һ.б. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Сериялы, сюжетлы һүрәттәр буйынса эш. Шиғырҙар ятлау. Ҡышҡы спорт һәм халыҡ уйындары уйнау. Түңәрәк уйындары, маҡсатлы прогулкалар. Экскурсиялар. Ҡышҡы ярыштар. Ҡар , һыу һәм боҙ менән тәжрибәләр үткәреү. Ҡыш тураһында рәссамдарҙың картиналарын һәм иллюстрациялар ҡарау. Йәнлектәр темаһына коллекциялар йыйыу.	Балалар эштәренән күргәҙмә “Гәлсәр ҡыш”
Әсәм теле- сәсән теле!	*Декабрь 2-се аҙна*	Үҙенеү сығышын белеү балала үҙ милләтенең мәҙәниәтен, телен, ғөрөф – ғәҙәтәрен, тарихын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу. Башҡорт халҡы-боронғо халыҡ икәнлеген аңлатыу. “Урал батыр, “Аҡбуҙат” эпостары менән таныштырыу. Боронғо	Сюжетлы – ролле уйын “Китапхана”. Дидактик уйындар. Сюжетлы һүрәттәр буйынса хикәйә төҙөү. Сериялы һүрәттәргә ҡарап һөйләмдәр төҙөү . Тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү, йомаҡтар	Мини – музейҙар конкурсы

		ҡалалар тураһында мәғлүмәттәр биреү (Арҡайым, Таналыҡ, Олаир) Халыҡ телдәренә ҡарата ихтирам тәрбиәләүҙе дауам итеү. Шәжәрә тураһында мәғлүмәттәр биреү.Башҡорт , рус һәм республикала йәшән башҡа милләт халыҡтарының ғөрөф – ғәҙәте, йолалары,ауыҙ – тел ижады тураһында ябай мәғлүмәттәр биреү.	сисеү. Музыка тыңлау һәм йырҙар өйрәнеү.	
Ҡышҡы биҙәктәр.	*Декабрь 3-сө аҙна*	Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Һауа торошон билдәләү һәм аңлата белергә өйрәтеү. Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыу. Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә , үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына тәьҫир итеүе тураһында белешмәләр биреү.Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыу. Ҡыш көндәре кешеләрҙең хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу.Һыу һәм боҙ менән эксперименттар үткәргәндә балаларҙың аҡыл – зиһенен үҫтереү һәм эҙләнеү – тикшеренеүгә ҡыҙыҡһыныуҙарын формалаштырыу.	Диактик уйындар “Был ҡайсаҡ була”, “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ”, “Ҡыш билдәләрен әйт”, “Мнемотаблица менә эш”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Ҡышҡы хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары уйнау. Түңәрәк уйындары “Беҙ күңелле балалар” һ.б. маҡсатлы прогулкалар. Ҡышҡы ярыштар. Һыу һәм боҙ менән тәжрибәләр үткәреү. Ҡыш тураһында рәссәамдарҙың картиналарын һәм иллюстрациялар ҡарау.	Балалар эштәренән күргәҙмә “Ҡышҡы биҙәктәр”. Тематик белем биреү эшмәкәрлеге “Ҡарбабайҙа ҡунаҡта”
Хуш киләһең, Яңы йыл!	*Декабрь 4-се аҙна*	Балаларҙы Яңы йыл байрамын әҙерләүгә актив йәлеп итеү (иртәлектәр, спектаклдәр, әкиәттәр, ата – әсәләр менән бергә байрамдар). Башҡа илдәрҙә Яңы йыл байрамдарын нисек үткәрелеүе тураһында мәғлүмәттәр биреүҙе дауам итеү.	Бөтә төр эшмәкәрлектәр буйынса эштәр. Дидактик уйындар “Миҙгел байрамдары”. Түңәрәк уйындары өйрәнеү. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Шыршы байрамына уйынсыҡтар әҙерләү. Төркөм бүлмәһен һәм уйын майҙансыҡтарын байрамса биҙәү.Уйын драматизациялар.	Яңы йыл иртәлектәре.
Нардуған.	*Ғинуар 2-се аҙна*	Балаларҙы башҡорт халыҡ йолалары,ғөрөф – ғәҙәттәре менән таныштырыуҙы дауам итеү, “Нардуған” байрамы, Селлә ваҡыты менән танышыу , байрамдың исемен, ғәмәлен атай белергә өйрәтеү;	Түңәрәк уйын “Нардуған”, Йомаҡтар, әйтемдәр,һынамыштар. Шиғырҙар. Үсекләшеүҙәр.	“Ҡышҡы Нардуған” фольклор байрамын

		Балаларҙың иғтибарын , үҙләштереү , ҡабул итеүҙе , сенсор тойоу һәләтен , һорауҙарға яуап биреү оҫталығын үҫтереү; Башҡорт халҡының ғөрөф - ғәҙәттәренә, байрамдарына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм һөйөү тәрбиәләү.	Бейеү “Дуҫлыҡ ”, “Лирик”. Уйын “Туңдырам ”. Йыр “Егеттәр”. Түңәрәк уйын “Әйләнәйек”.	үткәреү.
Изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ.	*Ғинуар* *3-сө аҙна*	Балаларҙы изгелек төшөнсәһе менән таныштырыуҙы дауам итеү, аралашҡанда әҙәпле, матур һүҙҙәр ҡулланыуҙы нығытыу, Яҡындарыңа, ололарға хөрмәт, ярҙам итеү, игелекле мөнәсәбәт, яҡшы эш эшләргә ынтылыш тәрбиәләү,	Сюжетлы-ролле уйындар: “Өләсәйем һәм мин”.	Дәрес-сәйәхәт “Өләсәйҙә ҡунаҡта ”.
Ҡышҡы уйындар.	*Ғинуар* *4-се аҙна*	Балаларҙың ҡыш һәм ҡышҡы уйындар тураһындағы белемдәрен арттырыу, спортҡа һөйөү, бер – береһенә ҡарата ихтирамлылыҡ тойғоларын тәрбиәләү.	Хәрәкәтле уйындар. Спорт күнекмәләре. Физик тәрбиә биреү буйынса эшмәкәрлектәр. Ритмик гимнастика. Иртәнге гимнастика. Сыныҡтырыу саралары. Дидактик уйындар “Нимә кәрәк?” h.б.	Спорт байрамы: «Ҡышҡы уйындар » .
Фән һәм ғилем.	*Февраль* *1-се аҙна*	Балаларҙа фәнгә ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уятыу. Опыт ,эксперимент үткәреү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыу. Тирә-йүнгә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.Балаларҙың актив эшмәкәрлеген үҫтереү.	Эксперимент, опыттар үткәреү . СРУ “Лаборант” Дидактик уйын “Һайлап ал” “Еҫенән бел”,”Үҫемлектәрҙең төрҙәре”, “Ҡайсан була?” Әңгәмәләр үткәреү.	Асыҡ дәрес үткәреү.
Ҡышҡы урман.	*Февраль* *2-се аҙна*	Ҡышлаусы ҡоштар, ҡыр хайуандары, йорт ҡоштары һәм хайуандарының ҡыш миҙгеленә ярашлы терекелек итеүе тураһында белемдәр киңәйтеү. Туҡланыу сылбыры тураһында мәғлүмәттәр биреү. Йылға һәм ундағы йәнлек, үҫемлектәр менән таныштырыу. Тәбиғәттә булған үҙ ара бәйләнеш тураһында белемдәр киңәйтеү.	Сюжетлы – ролле уйын: “Һунарсы” h.б. Дидактик уйындар “Был ҡасан була”, “Һүрәткә ҡарап һөйләйбеҙ”, “Ҡыш билдәләрен әйт”, “Мнемотаблица менә эш”, “Экологик пирамида”, “Был йәнлек ҡайҙа йәшәй”, “Һөйләү буйынса таны” h.б. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар	Тәбиғәт зоналары буйынса макеттар әҙерләү, Балалар эштәренән

		Япраҡлы, ылыҫлы, ҡатнаш урмандар булыуы тураһында белемдәр арттырыу. Башҡортостанда үҫкән ағастар, ҡыуаҡтар менән таныштырыуҙы дауам итеү, улар араһындағы айырмалыҡтарын күрә белергә өйрәтеү. Ағастарҙың ҡышты нисек ҡышлауҙары тураһында белемдәр киңәйтеү. Тәбиғәт зоналары тураһында белемдәр киңәйтеү. Төрлө тәбиғәт зоналарында йәшәүсе хайуандар, ҡоштар тураһында белемдәр формалаштырыу. Туғайҙа,болонда, яланда, баҡсала үҫеүсе сәскәләр тураһында күҙаллауҙаар үҫтереү., улар араһында айырмалыҡтарҙы таба белергә өйрәтеү.	ятлау. Ҡышҡы хәрәкәтле һәм халыҡ уйындары уйнау. Ҡыш тураһында рәссамдарҙың картиналарын һәм иллюстрациялар ҡарау.	күргәҙмә
Ватанды һаҡлаусылар көнө.	*Февраль 3-сө аҙна*	Рәсәй армияһы тураһында белемдәр киңәтеү. Әхлак – патриотик тәрбиә биреү эштәрен дауам итеү. Хәрби ғәскәр төрҙәре, хәрби техника, һөнәрҙәр менән таныштырыу.. Ҡыҙҙарҙа малайҙарға ҡарата хөрмәт уятыу. Һәр төрлө эшмәкәрлекте ил һаҡсылары темаһына арнап үткәреү. Башҡортостан һәм Рәсәй яугирҙары һәм геройҙарының Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары тураһында белемдәр байытыу.	Сюжетлы – ролле уйындар “Осоусылар”. Дидактик уйындар “Траспорт төрөн атап әйт”, “Был ниндәй һөнәр кешеһе?”, “Флагты төҙө”, “Тышҡы күренеш буйынса төркөмлә” һ.б. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Йырҙар тыңлау һәм өйрәнеү. Йомаҡтар сисеү. Батырлыҡ тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Ҡаланың крайҙы өйрәнеү музейына экскурсия.	Альбом әҙерләү “Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары”.
Хеҙмәт-тормош сығанағы.	*Февраль 4-се аҙна*	Балаларҙы хеҙмәткә күнектереү, йәмғиәткә ниндәй файҙа килтерәсәге тураһында әңгәмә ҡороу. Хеҙмәт барышында шатлыҡ хистәре кисереү.Өлкәндәр хеҙмәтенә хөрмәт тәрбиәләү, ололарға ярҙам ҡулы һуҙырға теләк уятыу. Төп профессиялар менән таныштырыуҙы дауам итеү.Көндәлек хеҙмәттә ҡатнашыу, активлыҡ тәрбиәләү.	СРУ “Бөҙрәхана”, “Почта”. Дидактик уйын “Ярҙам ит”, “Был ниндәй һөнәр эйәһе?”. Әҙәп-гигиена тураһында әңгәмә. Мәҡәл, әйтемдәр өйрәнеү, ятлау.Төҙөлөш материалдары менән төҙөүсе һөнәрен үҙләштереү.	“Мин үҫкәс кем булам?” рәсем күргәҙмәһе.

Әсәйем-бергенәм.	*Март 1-се аҙна*	Бөтә балалар эшмәкәрлеген әсәйҙәр байрамына арнап ойоштороу. Әсәйҙәр һөнәрҙәре менән таныштырыу. Герой – әсәләр, арҙаҡлы шәхестәр тураһында мәғлүмәттәр биреү. Малайҙарҙа ҡыҙҙарға ҡарата хөрмәт уятыу.	Сюжетлы – ролле уйындар “Ғаилә”, “Әсәйҙәр һәм ҡыҙҙар”. Дидактик уйындар “Кем күберәк наҙлы һүҙ әйтер?”, “Һөнәрҙең эш ҡоралдарын ата”.	Халыҡ – ара ҡатын – ҡыҙҙар көнөнә арналған иртәлек.
Өләсәйем һандығы.	*Март 2-се аҙна*	Балаларҙа халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә, фольклорына һәм өлкән быуынға ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү. Халҡыбыҙҙың үткәненә, бөгөнгөһөнә ҡыҡыҡыныу уятыу. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡул эштәре өлгөләре менән таныштырыу.	Балалар баҡсаһы музейына экскурсия. Китаптар күргәҙмәһен ҡарау. “Тирмә” уйыны.	Аулаҡ өй байрамы.
Яҙ килде.	*Март 3-сө аҙна*	Яҙ тураһында дөйөмләштерелгән белемдәр формалаштырыу. Хайуандарҙың, үҫемлектәрҙең тәбиғәттә булған үҙгәрештәргә яраҡлашыу үҙенсәлектәре тураһында күҙаллауҙар үҫтереү. Яҙ миҙгеленә хас билдәләрҙе айыра белергә өйрәтеү: ҡоштар йылы яҡтан ҡайта, йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт араһында үҙ ара бәйләнеш, сезонға ярашлы эштәр, тәбиғәт күренештәре тураһында. Йыл миҙгелдәрен айыра белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.	Халыҡ уйындары. Дидактик уйындар “Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”, “Был үҫемлек ҡайҙа үҫә”, “Дүртенсе артыҡ”, “Тышҡы күренеше буйынса танып бел”, “Был нимәнең һабағы (сәскәһе, олоно, япрағы, ботағы)?”, “Хеҙмәт өсөн нимә кәрәк?”, “Көн - төн”, “Хайуандарҙы айыр”, “Тәбиғәт күренешен ата”. Һауа менән тәжрибәләр. Яҡтылыҡ тураһында тәжрибәләр үткәреү. Моделдәр менән эш. Коллекциялар йыйыу. Түңәрәк уйындары. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Һүрәттәр ҡарау. Экологик һуҡмаҡта эш. Йырҙар, бейеүҙәр өйрәнеү. Музыка тыңлау. Ябай музыка ҡоралдарында уйнау. Миҙгелгә ҡағылышлы теләктәр, һынамыштар, юрауҙар өйрәнеү.	Балалар эштәренән күргәҙмә. “Ҡарға бутҡаһы” байрамынан – театрлаштырылған тамаша
Театр аҙнаһы.	*Март 4-се аҙна*	Балаларҙың театр тураһындағы дөйөм күҙаллауҙарҙы үҫтереү, уға эмоциональ ыңғай ҡараш тыуҙырыу, балаларҙың башҡарыу оҫталығы күнекмәләрен	Иллюстрациялар ҡарау, әкиәттәр сәхнәләштереү, нәфис әҙәбиәт уҡыу.	Презентация: “Балалар баҡсаһында-

		камиллаштырыу һәм телмәр, интонация өҫтөндә эшләү, балала үҙ-үҙен тәбиғи һәм иркен тотоу һәләтлеген үҫтереү, балаларҙа тормошҡа эстетик ҡараш булдырыу.		театр”.
Китап-белем шишмәһе.	*Апрель 1-се аҙна*	Программаға ярашлы күренекле башҡорт һам рус яҙыусылары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Китапҡа ҡағылышлы һөнәрҙәре менән таныштырыу: , хәреф йыйыусы, баҫыусы, дизайнер, оператор. Китап төрҙәре менән таныштырыу (әҙәби, ғилми, энциколопедик, балалар өсөн). Китап төҙөлөшө тураһында балаларға мәғлүмәттәр биреү (тышы, титул бите, биттәре, текст, иллюстрациялар һ.б.). Ҡағыҙ төрҙөре тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Китапҡа ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. “Ҡыҙыл китап” тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү.	Сюжетлы – ролле уйындар “Китапхана”, «Мәктәп». “Типография” һ.б. Әңгәмәләр “Китап нисек эшләнә?”, “Ҡағыҙ нисек эшләнә?”, “Аҡыллы китаптар” ни өсөн көрөк?” Дидактик уйындар. Тәбиғәт тураһында һәм балалар энциклопедияларынан күргәҙмә ойшторов. Коллекциялар әҙерләү (яратҡан йәнһүрәт геройҙары); Тематик китап күргәҙмәләре. Китаптар ремонтлау. Китапсыҡтар эшләү. Уйын – драматизациялар. Маҡсатлы прогулкалар, күҙәтеүҙәр. Балалр үҙҙәре уйлап сығарған әкиәттәрҙе сәхнәләштереү.	“Минең яратҡан китапсығым” күргәҙмә. Типографияға экскурсия. Балалар яҙыусыларына арналған тематик күргәҙмә.
Космонавтар көнө.	*Апрель 2-се аҙна*	Ер – беҙҙең уртаҡ йорт икәнен аңлатыу. Йыһан киңлеген үҙләштереү буйынса белемдәр формалаштырыу. Тәүге космонавт Ю.Гагарин тураһында белемдәр киңәйтеү. Ҡояш системаһында төрлө планеталар, йондоҙҙар һәм йондоҙсоҡтар тураһында мәғлүмәттәр биреү.	Сюжетлы-ролле уйын “Мин- космонавт”.	Ҡояш системаһы макеты әҙерләү.
Ер көнө.	*Апрель 3-сө аҙна*	Ер шары , ҡояш системаһы тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыуҙы дауам итеү. Күсер ҡоштарҙың тышҡы күренештәре, холоҡтары, туҡланыу, үрсеү ысулдары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Аквариум – балыҡтарҙың йәшәү урыны, мөхите, ундағы балыҡтар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Бөжәктәр тураһындағы тураһындағы	Сюжетлы – ролле уйын “Сәйәхәт”, “Йыһан”. Уйын – эстафеталар. Картиналар, иллюстрациялар ҡарау. Ситуациялы һөйләшеүҙәр, әңгәмәләр. Күҙәтеүҙәр . тәжрибәләр. Дидактик уйындар. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Фәнни – популяр әҙәбиәт менән танышыу.	Тематик сара “Ҡояш системаһы ”.

		төшөнсәләрҙе киңәйтеү: уларҙың тыҡланыу төрҙөре (үҫемлектәр, сәскә һуты, бөжәктәр менән), төркөмләргә өйрәтеү. Ҡаҙылма байлыҡтар тураһында белемдәр киңәйтеү. (алтын, баҡыр, тимер рудаһы).Ҡоро ер һәм һыу ятҡылыҡтары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү.	Ситуатив фекер алышыуҙар “Һыуһыҙ (ерһеҙ) йәшәп буламы?”, “Тәбиғәт стихиялары”, “Тәбиғәт байлыҡтары”. Күргәҙмәләр. Коллектив эш. Йомаҡтар. Викториналар. Музыка тыңлау, йырҙар өйрәнеү.	
Халҡым йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре.	*Апрель 4-се аҙна*	Башҡорт халыҡ йолалары менән таныштырыуҙы дауам итеү (кейеҙ баҫыу, ҡаҙ өмәһе, шәл бәйләү һ.б.). Башҡорт халҡының төп кәсеп һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү (ағас эшкәртеү һәм биҙәү). Төрлө милләт халыҡтары, уларҙың ғөрөф – ғәҙәттәре, йолалары, кейеме, йәшәйештәге шөғөлө тураһында ябай мәғлүмәттәр биреү. Ағастан эшләнгән предметтар (фанера, таҡта, бүрәнә һ.б.) тураһында күҙҙалауҙар формалаштырыу.	Сюжетлы – ролле уйындар “Ҡымыҙсылыҡ”, “Һунарсылыҡ”, “Малсылыҡ” һ.б. Рус һәм башҡорт мәҡәлдәрен өйрәнеү. Йомаҡтар сисеү. Диактик уйындар “Ағас эшкәртеү“, “Һарыҡ беҙгә нимә бирә?”, “Мәҡәлде әйтеп бөтөр”, “Һүҙъяһалыш уйыны”, ” Кәсеп – һөнәргә ҡағылышлы мәҡәлде әйтеп бөтөр”, “Йомаҡтар уйлап тап” һ.б. Бейеүле – таҡмаҡлы уйындар. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Музыка тыңлау һәм йырҙар өйрәнеү. Ата – әсәләр ҡатнашлығында йола байрамы әҙерләү	Дәрес-байрам (Милли кейемдәр), уйындар.
Еңеүгә дан!	*Май 1-се аҙна*	Балаларҙа Ватанға ҡарата һөйөү тәрбиәләү һәм патриотик тәрбиә биреү, Бөйөк Ватан һуғышы һәм уның батырҙары тураһындағы белемдәрҙе киңәйтеү, һуғыш батырҙары һәйкәлдәре менән таныштырыу. Балаларға әхлаки – ватансыллыҡ тәрбиәһе биреүҙе дауам итеү. Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары һәм балалары тураһында белемдәр формалаштырыу. Еңеү тураһында мәғлүмәттәр биреүҙе дауам итеү. Бөйөк Ватан һуғышы геройҙарына һәйкәлдәр тураһында белемдәр формалаштырыу. Өфө ҡалаһында урынлашҡан мемориаль таҡтаташтарға, һәйкәлдәргә экскурсиялар үткәреү. Тыл ветерандары һәм һуғыш ветерандары менән осрашыуҙар ойоштороу. Хәрби	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Иллюстрациялар ҡарау. Музыка тыңлау, йырҙар өйрәнеү. Ситуатив һөйләшеүҙәр. Сюжетлы – ролле уйындар “Ил һаҡсыһы”, “Танкист” һ.б. Дидактик уйындар. Хәрби техника (самолет уйынсыҡтары, танкылар) коллекциялары йыйыу. Фотоальбомдар әҙерләү.	Балалар эштәренән күргәҙмә. “Батырға - һәйкәл”- балалар эштәре күргәҙмәһе.

		званиелар тураһында күҙаллауҙар үҫтереү. Әхлаки – ватансыллыҡ, гендерлыҡ тәрбиәһе биреүҙе дауам итеү.		
Халҡымдың шөғөл-кәсептәре.	*Май 2-се аҙна*	Башҡорт халҡының кәсеп – һөнәрҙәре (йылҡысылыҡ, малсылыҡ, һунар итеү,бесән сабыу), традициялары, сәнғәте, йолалары (көнкүреш, миҙгел, ғаиләгә бәйле йолалар), көнкүреше менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт өйөнөң, тирмәнең эсендәге йорт йыһаздары, хужалыҡ әйберҙәре тураһында күҙалауҙар үҫтереү.	Сюжетлы – ролле уйындар “Ҡымыҙсылыҡ”, “Һунарсылыҡ”, “Малсылыҡ” һ.б. Рус һәм башҡорт мәҡәлдәрен өйрәнеү. Йомаҡтар сисеү. Диактик уйындар “Ағас эшкәртеү“, “Һарыҡ беҙгә нимә бирә?”, “Мәҡәлде әйтеп бөтөр”, “Һүҙъяһалыш уйыны”	Фольклор байрамы “Ҡарға бутҡаһы” (йәки теләк буйынса)
Милли ризыҡ.	*Май 3-сө аҙна*	Аҙыҡ-түлек, ашамлыҡтар исемдәрен үҙләштереүҙәрен нығытыу,телмәрҙә дөрөҫ әйтергә,ҡулланырға; үҙ-үҙеңде йәмәғәт урындарында әҙәпле тоторға өйрәтеү;әҙәплелек, ярҙамсыллыҡ кеүек сифаттар тәрбиәләү.	Сюжетлы-ролле уйын ”Минең әсәйем - ашнаҡсы”. Дидактик уйын “Башҡорт милли ризыҡтарын айырып һал”, “Ниндәй милләт ризығы?”	Милли ризыҡтар күргәҙмәһе.
Һаумы, йәй!	*Май 4-се аҙна*	Йәй миҙгеле тураһындағы белемдәрҙе дөйөмләштереү, ҡояштың кеше һәм йәнлектәргә, үҫемлектәргә тәьҫире. Емеш-еләк һәм йәшелсәләрҙең өлгөрөүе, уларҙы ҡышҡылыҡҡа һаҡлауға әҙерлек эштәре. Бөтә төр эшмәкәрлектәрҙе лә балалар баҡсаһы менән хушлашыу темаһына арнап ойоштороу. Мәктәпкә ҡарата ыңғай эмоциональ ҡараш тәрбиәләү.	Эстафеталар. Спорт уйындары һәм ярыштары. Нәфис әҙәбиәт уҡыу.	Хушлашыу иртәлеге. Күңел асыу: “Һабантуй”.
Бәхетле баласаҡ!	*Июнь 1-се аҙна*	Балалалр менән был байрам ни өсөн “Балаларҙы яҡлау” көнө тип аталғанына төшөнсә биреп китеү, уйлау һәләттәрен, зиһендәрен үҫтереү, бер-береһенә ихтирам, һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.	Йәнһүрәттәр ҡарау, иллюстрациялар. Күңелле эстафета.	Күңел асыу, төрлө спорт уйындары, ярыштар.
Салауат Юлаев-башҡорт халҡының милли	*Июнь 4-се аҙна*	Башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев менән таныштырыуҙы дауам итеү. Салауат Юлаевтың тыуған яҡ тәбиғәте, файҙалы ҡаҙылмалары менән таныштырыу.салауттың үҫмер сағындағы көнкүреше һәм төп шөғөлдәре тураһында	Салауат Юлаев бюсы янына экскурсия. Салауат тураһында нәфис әҙәбиәт уҡыу, хикәйәләр тыңлау. Һүрәткә ҡарап һөйләү. Сюжетлы – ролле уйынға “Салауат ғәскәре” атрибут эшләү. .	Спорт байрамы “Беҙ – йәш Салауатсылар ”.

батыры. *Июнь* *2-се аҙна*		мөғлүмәт биреү. Салауат Юлаевтың һәләте (шағир, сәсән, импровизатор) менән таныштырыу. башҡорт ир – егетенең образы һәм уның мәғәнәһе тураһында белемәдрен байытыу. С.Юлаевтың көрәш юлы һәм уның һуңғы яҙмышы менән таныштырыу.	Шиғырҙар ятлау. Һүрәт төшөрөү “Салауат портреты”. Салауаттың бала сағы тураһында хикәйә сәхнәләштереү.Хәрәктле уйындар “Ҡош атыу”, “Һунарсылар”, “Тирмә”, “Сәп һуғыу”.	
Пушкин көндәре.	*Июнь* *3-сө аҙна*	А.С.Пушкиндың “Балыҡсы ҡарт һәм балыҡ” тураһында белемдәрҙе дөйөмләштереү, белемдәрҙе киңәйтеү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Презентация: “А.С.Пушкин балалар өсөн”, иллюстрациялар ҡарау.	Күңел асыу: “Бәхетле баласаҡ”. Шиғырҙар конкурсы.
Дуҫлыҡтың ҡәҙерен бел.	*Июнь* *4-се аҙна*	“Дуҫ булайыҡ” темаһына әңгәмә. Маҡсат: балаларҙы әңгәмәгә йәлеп итеү, бер-береһенә иғтибарлы, ихтирамлы булыу тураһында һөйләшеү.	Нәфис әҙәбиәт уҡыу, мәҡәлдәр иҫкә төшөрөү, сценка ҡуйыу “Дуҫтар”.	Күңел асыу: “Дуҫты юғалтыуы еңел, табыуы ауыр”.
“Нимә ул яҡшы, нимә ул насар?”	*Июль* *1-се аҙна*	Балаларҙы “Нимә ул яҡшы, нимә ул насар?” тураһындағы белемдәрен дөйөмләштереү, киңәйтеү.	Мәҡәл, әйтемдәр иҫкә төшөрөү. Йәмәғәт урындарында үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү. Маҡсатлы прогулкалар.	Фотокүргәзмә ойоштороу.
“Сәләмәт тәндә-сәләмәт рух”. Йәйге уйындар.	*Июль* *2-се аҙна*	Әңгәмә “Һаулыҡ-ҙур байлыҡ ”. Маҡсат: һаулыҡ һәм сәләмәт тормош рәүеше тураһында балаларҙың белемдәрен камиллаштырыу. Балаларҙы бөхтәлеккә, үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбиәләү. Гигиена кәрәк-яраҡтары менән үҙ аллы эш итә белергә өйрәтеүҙе дауам итеү.Саф һауала йөрөү, спортҡа һөйөү уятыу.	Сюжетлы – ролле уйындар “Больница”, “Ғаилә”, “Бөҙрәхана”. Хәрәкәтле уйындар. Спорт күнекмәләре. Физик тәрбиә биреү буйынса эшмәкәрлектәр. Ритмик гимнастика. Иртәнге гимнастика. Сыныҡтырыу саралары. Дидактик уйындар “Нимә кәрәк?”, “Аскорбинка һәм уның дуҫтары”, “Витаминдарҙың файҙаһы”, “Кешенең тән өлөшө”, “Тире нисек тын ала?” һ.б.иллюстрациялар ҡарау. Нәфис әҙәбиәт уҡыу. Ял	Спорт байрамы: “Күңелле старт”

			минуттары. Аптекаға экскурсия. “Танау, ҡолаҡ, танау”. Күңелле уйын “Карусель”.	
Тәмлекәс тәр көнө.	*Июль 3-сө аҙна*	Балалар менән әңгәмә ҡороу, матурлыҡты күрә белеү, тәмлекәстәрҙең файҙалы, зарары тураһындағы белемдәрен арттырыу, байрамға атрибуттар әҙерләү, бер-береңә ярҙам итеү, хөрмәт тойғоһо тәрбиәләү.	Иллюстрациялар ҡарау. Сюжетлы-ролле уйын “Магазин”.	Төрлө фантиктар менән биҙәлгән костюмдар күргәҙмәһе.
Урманда һаҡ бул.	*Июль 4-се аҙна.*	Балалар менән үҫемлектәр донъяһы менән танышыуҙы дауам итеү, матурлыҡ, таҙалыҡ һаҡлауға ынтылыш тәрбәиәләү. Һаулыҡ һәм сәләмәт тормош рәүеше тураһында белемдәрен камиллаштырыу.	Иллюстрациялар ҡарау, дидактик уйын “Был ниндәй ағас?”, “Был ниндәй ағастың япрағы?”	Фотоһүрәттәр күргәҙмәһе.
Башҡорт халыҡ уйындары	*Август 1-се аҙна.*	Балаларҙың халыҡ уйындары тураһында белемдәр формалаштырыу. Йыл миҙгеленә бәйле уйындарға ылыҡтырыу (“күмер йөҙөк”, “йәшерәм яулыҡ”, “осто - осто” һ.б.).	Башҡорт халыҡ уйындарын уйнау: “Йәшерәм яулыҡ”, “Аҡ тирәк, күк тирәк”, “Аҡ ҡалас”, “Наза” һ.б.	Фольклор байрам (теләк буйынса).
Үҙ үҙемде уйлайым, һаулығымды һаҡлайым	*Август 2-се аҙна.*	Сәләмәт тормош рәүеше тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Кеше организмының эшмәкәрлеге үҙенсәлектәре һәм уның бер бөтөн булыуы тураһында балаларҙың белемдәрен байытыу. Кешенең тышҡы яҡтан айырылып торған сифаттары (буй, һын, күҙ, сәс төҫө) һәм аҡыл һәләтлелектәре тураһындағы төшөнсәләрҙе системалаштырыу.Кәүҙәнең төҙөлөшө, ҡайһы бер эске ағзалары (йөрәк, үпкә, ашҡаҙан, ҡан тамырҙары) тураһында төшөнсә биреү. Сәләмәт йәшәү рәүешенең мөһим компоненттары (дөрөҫ туҡланыу, хәрәкәт, йоҡо һәм ҡояш, һауа һәм һыу – беҙҙең яҡын дуҫтарыбыҙ) һәм һаулыҡты ҡаҡшатыу факторҙары тураһында күҙаллауҙарын киңәйтеү. Көн режимы, гигиена тураһында белемдәрен	Эстафеталар. Спорт уйындары һәм ярыштары. Өҫтәл уйындары. Энциклопедиялар ҡарау. Әңгәмәләр. Гәзиттәр конкурсы “Әсәй, атай һәм мин – һау – сәләмәт ғаилә”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу.. Викториналар. Коллекциялар әҙерләү (спорт төрҙәре).дидактик уйындар “Кешенең тән төҙөлөшө”, “Кешенең эске ағзалары”, “Йәшәү өсөн нимә кәрәк?” һ.б.	Спорт байрамы “Әсәй , атай һәм мин – спорт ғаиләһе”.

		киңәйтеү.Сыныктырыу төрҙәре һәм ҡағиҙәләре, уларҙың файҙаһы тураһында күҙҙаллауҙарын киңәйтеү.Ҡояштың, һыуҙың һәм һауаның кеше томошона һәм уның һаулығына бәйле булыуы тураһында күҙаллауҙарын үҫтереү.		
Рәсәй киноһы көнө.	*Август 3-сө аҙна*	Мәктәпкәсә йәштәге балалары менән бөтә Рәсәй киноһы көнө менән танышыуҙы дауам итеү, балаларҙа ҡыйыулыҡ телмәр үҫтереү, киноларға, йәнһүрәттәргә ыңғай ҡараш тәрбиәләү. Балалар менән берлектә йәнһүрәт төшөрөп ҡарау.	Иллюстарциялар ҡарау, Рәсәй киноһы тураһында презентациялар. Йәнһүрәттәр ҡарау.	Фотокүргәзмә ойоштороу, иллюстрациялар ҡарау, балаларҙың ҡараған киноларынан, йәнһүрәттәренән фотоһүрәттәр.
Һау бул, йәй!	*Август 4-се аҙна*	“Мин нисек ял иттем?”-тигән темаға һөйләшеү алып барыу, йәйге һәм көҙгө һауа торошон сағыштырырға өйрәтеүҙе дауам итеү, тәбиғәткә ҡарата һөйөү тәрбиәләү.	Әңгәмә “Минең йәйем нисек үтте?”. Нәфис әҙәбиәт уҡыу.	Күңел асыу: “Һау бул, матур йәй!”,